

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# ЙӘШӘҺЕН БАШҠОРТ ИЛЕ!

Мәшһүр Башҡорт иле! Оло Иҙелдән (Волганан) Тубыл йылғаһына, Каспий буйынан Пермгәсә тиклем йәйрәп ятҡан ерҙәрҙе биләгән, IX—X быуаттарға тиклем үк барлыҡҡа килгән боронғо Башҡорт иле! Дәһшәтле булғарҙар, ғуздар, хазарҙар менән күрше йәшәп, үҙаллы халыҡ булып үҫешкән ғәйрәтле башҡорттар!

Урыҫ дәүләтенә ҡушылған осорҙа ла ҡанбабаларыбыҙ Тубыл йылғаһының урта ағымынан Волганың урта ағымына, Илек йылғаһының түбәнге ағымынан Камаға, Чусовая һәм Сылва йылғаларының урта ағымына тиклем биләмәләрҙә ирәйеп донъя көткән. «Ҡуҙыйкүрпәс» эпосында Иртыш йылғаһы башланып киткән ерҙә борон башҡорттарҙың ғүмер итеүе, мал-тыуарҙарының ишле булыуы һөйләнелә. Көньяҡ Урал тауҙарынан баш алып, далаларға ағып килгән Мейәс, Уй йылғалары, шулай уҡ Иҫәт, Тинес, Тубыл буйҙарында ла йәйләгәндәр. Үләнгә, һыулауға бай төйәктә йәшәгән башҡорт ырыуҙары сыңғырсыңғыр сыңраған өйөр-өйөр йылҡы, мөңөр-мөңөр мөңрәгән көтөү-көтөү һыйыр малын эйҙәгән. Януар-кейек тә аулағандар, солоҡсолоҡ менән дә шөғөлләнгәндәр.

Башҡорт ырыуҙары күп булған. Башҡорт илендә бөрйән, ҡыпсаҡ, барын, табын, әйле, үҫәргән, тамъян, түңгәүер, меңле, ҡатай, юрматы, уран, ғәйнә, танып, йәнәй, гәрә, йылан, ирәкте, йәлдәк, көҙөй кеүек башҡорт ырыуҙары аҫаба булған. «Башҡорт тарихы» риүәйәтендә сағылыуынса, Барын-Табын, Тиләү-Табын, Тамъян-Табын, Кәлсер-Табын волостарының ер сиктәре генә лә көнсығышта Мейәс йылғаһы түбәненә буйлатып Арғужа күленә

барып еткән, Арғужа күленән Тинес йылғаһына сыҡҡан, Тинес йылғаһы буйлатып Тубыл йылғаһына саҡлы барған да, Тубылды аша сығып, Йәбеләй татырлауығына саҡлы һуҙылған, унан ары Урҡас күленә төшөп, Оло Ҡыҙыл тамағына кире әйләнеп ҡайтҡан. Урал аръяғында әйле ырыуының биләмәләре, Ишем йылғаһы буйлап ҡатайҙарҙың төйәге лә булған.

«Урал батыр» эпосында тасуирланыуынса, башҡортҡа йән һәм йәм биреүселәр, башҡорт ырыуҙарын башлап ебәреүселәр —Йәнбирҙе менән Йәнбикә, барына ата, барына инә булған ер — Урал. Башҡорттар борон-борондан Урал тауы ҡуйынына һыйынып йәшәгән һәм уның менән хозурланып моңланған:

Уралҡайым минең, һин
йәмлеһең,
Ҡаяларың бигерәк һөйкөмлө,
Тыуған балаларын ҡосаҡлаған
Инәйҙәрҙең ҡуйыны шикелле.

Ошо йәннәттәй ерҙе яуларға илбаҫарҙар көнтыуыштан да, төшлөк тарафынан да ябырылған, ҙур яу килгәндә башҡорт ырыуҙары бербереһенә оран бирешеп, сиреү туплап, яу ҡайтарған. Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын. Ошо ваҡытта бер нисә ырыу берләшкән. «Атайсал» риүәйәтендә сағылыуынса, ете ырыу: бөрйән, ҡыпсаҡ, түңгәүер, юрматы, тамъян, үҫәргән, ҡатайҙар көс-ҡөҙрәтте арттырыр өсөн бергә ойошорға ҡарар иткән. Ете ырыу бейҙәре һәм батырҙары Көньяҡ Уралдың Атайсал туғайында йыйын үткәргән. Ырыуҙар берләшеп, бергәләшеп яу ҡайтарған. Ырыуҙар, бейҙәр Мәсем ханға буйһонған. Мәсем хандың йәйләүе Мәсем тауы буйында булған.

Йыйын үткәрелгән урында үҫкән имәнгә һәр ырыуҙың тамғаһы сабылған. Был үҙ-ара килешеп, татыу йәшәүҙе аңлатҡан. Йыйынға килеүселәр тамғалы имәнгә ризалыҡ билдәһе итеп таҫмалар, тәңкәләр таҡҡан. Мәсем хан мәлендә лә, унан һуң да ете ырыу вәкилдәре кәңәшләшер өсөн йыйынға йыйылған. Ҡайҙа йәйләүгә сығыу, ҡайһы ырыуға ҡайҙа мал йөрөтөү, ил-йорт хәлдәре тикшерелгән.

Ете ырыу һымаҡ башҡа ырыуҙар ҙа йыйындар үткәргән. Ырыу берҙәмлегенең тамыры, символ-сығанағы — шәжәрә, ағас, тамға, ҡош һәм хәрби оран. Үҙидара органдары — халыҡ йыйындары һәм аҡһаҡалдар ҡоро. Йыйындар тәбиғәт йәшәреп, йәйләүҙәргә сыҡҡас, йәмле болондарҙа, иркен тау түбәләрендә үткәрелгән. Тирә-яҡҡа ат саптырып, ҡунаҡтар, арҙаҡлы уҙамандар, аҡһаҡалдар саҡырылған. Улар донъя хәлдәре, ил-йорт именлеге, ер-һыуҙы һаҡлау, илде ҡурсалау тураһында һөйләшкән, һүҙ-кәңәш беректергән. Һаба-һаба ҡымыҙ бешелгән, һимеҙ-һимеҙ ит бешкән, күнәктәрҙә буҙа күпергән.

Йыйынға килгән халыҡ бик йомартланып ихлас күңелдән һыйлашҡан, күңел асҡан. Көрәшкәндәр, йүгерешкәндәр, ат сабыштырғандар. Думбыраға, ҡумыҙға, ҡурайға ҡушылып йырлашҡандар, бейешкәндәр, йортҡа ырыҫ, бәхет теләгәндәр. Ил именлегенә саҡырып, ҡурай моңо, башҡорт йыры яңғыраған:

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы —
Ата-олатайҙарҙың да төйәге...

Рәсәй генә тигән батшалыҡтың батшалары йыйындарҙы тыйырға ла маташып ҡараған, әммә халыҡ йыйындары быуаттарҙан-быуаттарға, быуындарҙан-быуындарға күсеп дауам иткән. 1917 йылда Ырымбурҙа I Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы йыйылған. Унда Өфө, Ырымбур, Һамар, Пермь губерналарынан башҡорт вәкилдәре йыйылған, юғары милли власть органы итеп Башҡорт Мәркәз шураһы һайланған.

1995 йылдың 1-2 июнендә I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы —

ижтимағи-сәйәси йыйыны үткәреләп, “Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү” программаһы ҡабул ителде. Ҡоролтайҙа ғәйәт әһәмиәтле түбәндәге мәсьәләләр тикшерелде: тарих һабаҡтары: иҫән ҡалыу, хеҙмәттәшлек тәжрибәһе һәм демография мәсьәләләре; башҡорттарҙың дәүләтселеге, Рәсәй Федерацияһы составында Башҡортостан Республикаһының суверенитетын нығытыу һәм үҫтереү; Башҡортостан һәм башҡорт диаспораһы: этностың тупланыу проблемалары; башҡорт теле: ҡулланыу һәм үҫеш проблемалары; йәшәү мөхите, сәләмәтлек һәм генофондты һаҡлау; милләт һәм яңы иҡтисади мөнәсәбәттәргә инеү проблемалары; башҡорттарҙың ижтимағи-сәйәси хәрәкәте; башҡорт этносының рухи торошо: тергеҙеү һәм перспективалар; башҡорт ҡатын-ҡыҙы, ғаилә һәм балалыҡ; башҡорт йәштәре проблемалары.

2002 йылдың 14-15 июнендә Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы Өфөлә II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы йыйылды. Донъяның байтаҡ илдәренән: Америка Ҡушма Штаттарынан, Франциянан, Италиянан, Германиянан, Австралиянан, Төркиәнән, Үзбәкстандан… Йәнә Удмурт, Татарстан республикаларынан, Ханты-Манси автономиялы округынан, Силәбе, Ҡурған, Свердловск, Пермь, Һамар, Һарытау, Ырымбур өлкәләренән, Санкт-Петербург, Мәскәү ҡалаларынан…

Ете йөҙҙән ашыу делегат, башҡорт ҡәрҙәштәребеҙ вәкилдәре, ҡунаҡтар Беренсе Ҡоролтай ҡарарҙарының үтәлеше, башҡорт халҡының берләшеүе һәм үҫеше, халыҡ иҫәбен алыу кеүек мөһим мәсьәләләр буйынса фекер алышты. Ҡоролтай делегаттары түбәндәге ун ике секция эшендә ҡатнашты: “Тирә-яҡ мөхит һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының һаулығын һаҡлау”, “Башҡортостандың иҡтисади һәм халыҡтың социаль-иҡтисади хәле”, “Башҡортостандың тотороҡло үҫеш факторы булараҡ — ер”, ”Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Законды тормошҡа ашырыу”, “Башҡорт милли мәғарифы торошо, проблемалары һәм перспективалары”, “Башҡорт халҡының демографияһы: үткәне һәм бөгөнгөһө”, “Халыҡ тарихы һәм уның башҡорттарҙа милли үҙаң формалаштырыуҙағы роле”, “Рәсәйҙә федерализмдың киләсәге: Рәсәй һәм Башҡортостан Республикаһы”, “Йәмғиәттә һәм ғаиләлә башҡорт ҡатын-ҡыҙының роле”, “Йәштәр — Башҡортостандың киләсәге”, “Башҡорт халҡының хәҙерге рухи донъяһы”, “Рәсәйҙә, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙә башҡорттар: тергеҙеү, үҫеш һәм хеҙмәттәшлек проблемалары”. Ошо секцияларҙа яһалған докладтарҙа, фекер алышыуҙарҙа башҡорттарҙың һәм, ғөмүмән, Башҡортостандың башҡа халыҡтарының ижтимағи-сәйәси, социаль-иҡтисади, рухи-мәҙәни үҫешенең төп йүнәлештәре ҡаралды. Улар секцияларҙың резолюцияларында сағылыш тапты. Пленар ултырышта бөтә эшкә йомғаҡ яһап, делегаттар Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы резолюцияһын, башҡорт халҡына мөрәжәғәт, Башҡортостан халыҡтарына мөрәжәғәт, Рәсәй Федерацияһы Президенты В.В.Путинға мөрәжәғәт ҡабул итте.

Киләсәккә баҡып, шуны әйтке килә: Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының ҡарарҙарын бойомға ашырыу башҡорт халҡының үҙенә ҡайтып ҡала. Ирекле көндәр, күркәм тормош, бәхет һәр ҡан ҡәрҙәшебеҙҙең әүҙемлегенә, йүнселлегенә бәйле. Шуны һис онотмайыҡ: “Иле берҙәмдең — көнө берҙәм! Иле барҙың — теле бар! Халыҡ барҙа — хаҡлыҡ бар!”. Халҡыбыҙ барҙа иһә Башҡорт иле йәшәр һәм йәшәрер. Халҡыбыҙҙы бар итеү үҙебеҙгә ҡайтып ҡала.